# БЕҘЕН өйҙөң яңылыҡтары

МӘҒЛҮМӘТ БИТЕ

**“48-се Башҡорт лицейы“ Өфө ҡалаһы**

Август 2019 йыл Осҡондан ялҡын ҡабыла




"Ҡояшҡай" көнөдөҙгө ял үҙәгендә 7-14 йәшкә тиклем 100 бала ял итеп, һаулыҡтарын нығыттылар. Төрлө мәҙәни сараларға, ҡала буйлап экскурсияларға йөрөнөләр, ҡала балалар китапханаларына барҙылар, спорт ярыштарында ҡатнашып призлы урындар яуланылар. Балаларҙың ялы файҙалы һәм күңелле үтте.

--









# Ял һәм хеҙмәт лагеры.

3-сө июндән 20-се июнгә тиклем лицей базаһында хеҙмәт һәм ял лагеры эшләне. Мин ошо лагерға ҙур теләк менән йөрөнөм. Мәктәп баҡсаһында хеҙмәт итеү менән бергә күңелле ял да иттек. Егеттәр ҡыуаҡлыҡтарҙы тигеҙләне, урам һеперҙеләр, ә беҙ,ҡыҙҙар, сәскә утаныҡ, сүп үләндәрен йолҡтоҡ, китапханала эшләнек, ашханала ашнаҡсы апайҙарға ярҙам иттек. Эш бөткәс уйнарға ярай, тигәндәй, эштән һуң төрлө уйындар уйнаныҡ. Ашнаҡсы апайҙар беҙҙе тәмле төшкө аш менән һыйланы.

***Нафиҡова Гөлназ, 8-се б класы уҡыусыһы.***







Баш мөхәррир: Ильясова Г.М.
Компьютер версткаһы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары.